МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

*Күңел асыу сараһы:*

# "Был донъяның матурлығы-әсәйҙәрҙә!"

# Был донъяның матурлығы-әсәйҙәрҙә!

## Уртансылар төркөмө өсөн байрам сценарийы.

*Балалар залға инәләр,ярым түңәрәккә торалар.*

**Алып барыусы:** Байрам бөгөн,байрам бөгөн

Балалар баҡсаһында

Әсәйҙәрҙе,өләсәйҙәрҙе

Баҡсалағы апайҙарҙы

Саҡырҙыҡ барыһында.

**Алып барыусы:** Яҙ көлә-көлә килә

Гөрләүектәр көлөшә

Бейек тауҙың баштарында

Аҡ ҡайындар серләшә.

**Йыр “Әсәйҙәр байрамы”**

**Алып барыусы:** Көндәрҙе йылытып,алһыу нурҙар һибеүсе ҡояшы,ҡыйыҡтарҙан тамыусы шаян көмөш тамсылары менән бергә күңелле яҙ килде.Ә һеҙ беләһегеҙме яҙҙың иң беренсе байрамы ниндәй байрам?

**Балалар:** .Әсәйҙәр байрамы.

**Алып барыусы:** Эйе,яҙҙың беренсе байрамы-һигеҙенсе март.Ул беҙҙең ҡәҙерле әсәйҙәребеҙҙең,өләсәйҙәрҙең,апайҙарҙың,һылыу ҡыҙҙарыбыҙҙың байрамы.һеҙҙе барығыҙҙы ла яҙ байрамы менән ҡотлайбыҙ,һеҙгә сәләмәтлек,ғаилә бәхете,күктәрегеҙ һәр ваҡыт аяҙ,күңелдәрегеҙ тыныс һәм шат булһын.

**Шиғырҙар.**



**Алып барыусы:** Әсәй!ошо кес кенә һүҙгә күпме наҙ йылылыҡ һыйған.Улар беҙҙең бәләкәй шатлығыбыҙҙы ла ҙур итеп күрәләр,ауыр саҡта һәр саҡ ярҙам итәләр.

**Алып барыусы:** Әйҙәгеҙ әсәйҙәрҙе беренсе байрамдары менән ҡотлап уларға иң изге,иң матур теләктәребеҙҙе,матур һүҙҙәребеҙҙе әйтәйек.

**Бала:** Әсәйем-ҡәҙерлем

Әсәйем-матурым

Әсәйем-бәхетем

Әсәйем-һөйөклөм

Әнием – кадерлем!

Әсәйем-ҡояшым



Әсәйем-алтыным

Әсәйем-йомшағым

**Алып барыусы:** Беҙҙе наҙлап үҫтергәнгә

**Балалар**: Әсәйҙәр һеҙгә рәхмәт!

**Алып барыусы:** Көс һәм ҡеүәт,дәрт биргәнгә

**Балалар**: Әсәйҙәр һеҙгә рәхмәт!

**Лирик бейеү**

Көй яңғырай.Залға Ҡояш инә.

**Ҡояш:**һаумыһығыҙ балалар,һаумыһығыҙ ҡунаҡтар.

Яҙ килде.яҙ бөгөн

Әсәйҙәр байрамы

Диңгеҙҙәй сайҡала

Сәскәләр бәйләме.

**Алып барыусы**: Һаумы Ҡояшҡай.Беҙ был залда байрамға йыйылдыҡ барыбыҙҙа.

**Ҡояш**: Рөхсәт итегеҙ миңә барығыҙҙы ла ошо яҙҙың беренсе байрамы менән ҡотларға.Ғүмерегеҙҙең килер көндәре сәскәләй матур,ҡояштай нурлы булһын.

**Алып барыусы**:Балалар һиңә тип йыр-бейеүҙәр,шиғырҙар әҙерләнеләр.

**Шиғырҙар**

**Кояш:**Балалар әйҙәгеҙ минең уйын уйнап алайыҡ.Мин үҙем йылмайып торам тик бына минең нурҙарымды йыйырға кәрәк,һеҙ ярҙам итәһегеҙме?

**Уйын “Ҡояш нурҙарын йыяйыҡ ”**

**(**Уйын эстафета формаһында,таҡтала көлөп торған ҡояш,нурҙары юҡ,балалар бер-бер артлы алмашлап нурҙар ҡуялар.**)**



**Ҡояш:**Афарин балалар.Бигерәк матур уйын килеп сыҡты.

**Алып барыусы:**Йырҙар йырлап бейей-бейей

Түңәрәктә уйнайбыҙ
Әсәйҙәрҙе яратабыҙ
Уларҙы беҙ ҙурлайбыҙ.

**Йыр “ Ах какая мама ”**

**Ҡояш**:Матур йырланығыҙ.Әсәйҙәргә лә ял итеп алырға ваҡыт етте.Әйҙәгеҙ уйнап алайыҡ.

**Уйын “Яғымлы һүҙҙәр”**

(әсәйҙәр балаларға аҙым һайын яғымлы һүҙҙәр әйтәләр )

**Алып барыусы:**Һәр йыл һайын килә был байрам
Һәр көн тыуған ҡояш шикелле
Йылдар һайын данлай был байрам



Гүзәл кеше –әсә кешене.

**Йыр “Зореньки краше”**

**Уйын “Кәнфитте ас”**(бокс бирсәткәһе менән көнфитте асырға әсәйҙәргә,өсөшәр кәнфит асалар,ике әсәй сыға уйынға.)

**Алып барыусы:**Ниндәй рәхәт байрам көндә

Ҡояштай балҡый бүлмә
Һандуғастай моңло итеп

Бейейбеҙ бергә-бергә.

**Бейеү “Моряктар”**

**Ҡояш:**Әйҙәгеҙ әсәйҙәр менән бергәләп уйнап алайыҡ.

**Уйын “Күңелле беҙгә”**

**Ҡояш**:Балалар һеҙ матур итеп бейенегеҙ,уйнанығыҙ.Мин бит һеҙгә буш килмәнем һеҙгә тип үҙемдән иҫтәлеккә бәләкәй генә бүләктәр алып килдем. Әсәйҙәрегеҙҙе,апайҙарығыҙҙы тыңлап матур аҡыллы балалар булып үҫегеҙ.Минең эштәрем күп ,тирә-яҡҡа байрам кәйефе тыуҙырып,нурҙарымды һибәйем.ҡайтырға ваҡыт, һеҙҙең менән күңелле булды(тәмлекәстәр,йә булмаһа медальондар бирә)һаубулығыҙ.

**Алып барыусы:**Балалар,Ҡояш апайға рәхмәт әйтәйек.Һеҙҙе лә беҙ байрам менән ҡотлайбыҙ.Һаубулығыҙ.

(Ҡояш сыға)



**Алып барыусы:**Ҡояш апайҙа ҡайтты , ә беҙҙә байрам дауам итә.Әйҙәгеҙ бергәләп әсәйҙәр бешергән тәмле ҡоймаҡтар тураһында йырлап алайыҡ.

**Йыр “Рәхмәт әсәй”**

**Алып барыусы:**Балалар ә хәҙер төркөмгә ҡайтып Ҡояш апайҙың күстәнәстәре менән сәй эсәйек.Һеҙҙе барығыҙҙы ла байрам менән ҡотлайбыҙ яҙ ҡояшы һымаҡ килер көндәрегеҙ яҡты нурлы булһын.(Балалар сығалар)